БДУ-ның Бөрө филиалы

Филология һәм мәҙәниәт-ара коммуникациялар факультеты

СЫҒАРЫЛЫШ КВАЛИФИКАЦИЯ ЭШЕНЕҢ ТЕМАҺЫ:

# НОҒМАН МУСИН ПРОЗАҺЫНДА ЭКОЛОГИЯ АСПЕКТЫ

**Башҡарҙы**: Ғәйниәхмәтова Лилиә Фәнир ҡыҙы

**5-се курс студенты**

**Ғилми етәксеһе**: ф.ф.к., доцент

Ҡасҡынова Гөлнур Нуриман ҡыҙы

Тәбиғәт менән кешенең мөнәсәбәте уның тәрбиәһенән, алған белеменән, донъяға ҡарашынан тора. Был мәсьәлә, әлбиттә, яҙыусылар ижадынан да ситтә ҡалмай. Һәр әҙип әҫәр ижад иткәндә иң тәүҙә тыуған яғы тәбиғәтен тасуирлай, уны яратырға, һаҡларға өндәй.



## Эштең актуаллеге

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә экология темаһын төрлө яҡлап асҡан әҫәрҙәр араһында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың башҡорт урмандарының аяуһыҙ ҡырылыуына әсенеп яҙған роман-повестары, хикәйәләре айырым урын алып тора. Ноғман Мусиндың тәбиғәтте һаҡлауға арналған әҫәрҙәрен махсус өйрәнеү һәм XXI быуат әҙәбиәтсеһе күҙлегенән баһа биреү сығарылыш квалификация эшенең актуаллеген билдәләй.

# Сығарылыш квалификация эшенең маҡсаты һәм бурыстары

**Эштең маҡсаты түбәндәге бурыстарҙы хәл итеүҙе талап итә:**

- “Йыртҡыс тиреһе” романында замандың көнүҙәк проблемаларының хайуандар яҙмышына йоғонтоһон өйрәнеү;

-“Төпкөлдән төшкән килен” повесында тәбиғәт һәм кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙе асыҡлау;

-“Һуңғы солоҡ” романында экология проблемаһын өйрәнеү;

- дәрестән тыш эшмәкәрлектә хәҙерге башҡорт прозаһында экология проблемаһын өйрәнеү юлдарын барлау. «Тауҙар тыны» повесын ФДББС шарттарына ярашлы өйрәнеү.

## Теманың өйрәнелеү кимәле

Филология фәндәре докторы Г.Н. Гәрәева “Хәҙерге проза үҙенсәлектәре” тип аталған хеҙмәтендә Н. Мусиндың романдарының композиция үҙенсәлектәренә байҡау яһау менән бергә әҫәрҙәрендә экология проблемаларының сағылышын да өйрәнә .

**Объекты** – Ноғман Мусин ижадында экология темаһы.

**Предметы** – Ноғман Мусиндың “Һуңғы солоҡ”, “Йыртҡыс тиреһе” романдары, “Төпкөлдән төшкән килен”, “Тауҙар тыны” повестары.

# Апробацияһы

**Ғәйниәхмәтова, Л.Ф.** Ноғман Мусиндың «Һуңғы солоҡ» романында тәбиғәт һәм кеше күңелдәре экологияһы / Л.Ф. Ғәйниәхмәтова // Современная наука: актуальные проблемы, достижения и инновации [Электронный ресурс]: Сборник статей по материалам второй Всероссийской научно-практической конференции. – Белебей: СамГТУ, 2021.



# Эштең структураһы

Эш инештән, өс бүлектән, йомғаҡлауҙан, ҡулланылған әҙәбиәт һәм сығанаҡтар исемлегенән, ҡушымтанан тора.

# 1 БҮЛЕК. НОҒМАН МУСИН ПРОЗАҺЫНДА КҮТӘРЕЛГӘН ЭКОЛОГИК ПРОБЛЕМАЛАР






**ҺУНҒЫ СОЛОҠ**

*Роман*

Әҫәрҙең башын уҡығас та, был әлеге шул урмандары тураһында яҙмаҡсы икән, тип уйларһың инде, уҡыусым. Һәм яңылышмайһың да. Һөйләр һүҙем, уйҙарым тағы ла йәнтөйәгебеҙ тәбиғәт һәм урман күҙенә ҡарап торған кешеләр хаҡында. Башыбыҙға төшкән кирле-мырлы тормош та, йөрәктәргә ҡан һауҙырған ҡатмарлы, хатта фажиғәле яҙмыштар ҙа мине тереклек донъяһына һулар һауа биргән, әсер һыуҙарыбыҙҙы һаҡлаған, Ер йөҙендә әҙәм балалары өсөн берҙән-бер тоғро таяныс булып ҡалған, ләкин Ер яҙмышына ла, үҙ яҙмышына ла төкөрөп ҡараусы кешеләрҙең ҡот осҡос хыянаты арҡаһында ҡотолғоһоҙ һәләкәт алдында торған ер биҙәге тураһында ҡабат-ҡабат уйланырға һәм ҡулыма ҡәләм алырға мәжбүр итә.

Минең өсөн ҡыбырлаусы, хәрәкәт итеүсе тереклек кенә түгел. Ер йөҙөнә хасил ҡылынған һәр нәмә: ағастар, меңәрләгән төрлө үләндәр, күҙ яуын алған сәскәләр, йылға-күлдәр, тау-таштар — бөтәһе лә йән эйәһе. Улар ҙа бит

# 1-се бүлек буйынса һығымта

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһыНоғман Мусиндың тәбиғәт, мәңгелек ҡиммәттәр тураһында уйланыуҙар тулы, экология мәсьәләләре буйынса саң һуҡҡан әҫәрҙәре араһында “Һуңғы солоҡ” романы, “Йыртҡыс тиреһе” повесы айырым урын алып тора. Уларҙа күтәрелгән тәбиғәт һәм кеше мөнәсәбәттәре араһындағы проблемалар һәр осорҙа ла актуаль.

# 2 БҮЛЕК. Н. МУСИНДЫҢ “ТӨПКӨЛДӘН ТӨШКӘН КИЛЕН” ПОВЕСЫНДА ТӘБИҒӘТ ҺӘМ КЕШЕ ЯҘМЫШЫ

Ноғман Мусиндың “Төпкөлдән төшкән килен” повесында тәбиғәткә ҡарата битарафлыҡтың сағылышы ҡаралды.




ТӨПКӨЛДӘН ТӨШКӘН КИЛЕН

1

— Был ни иткән малай булды әле, — тип улына әсиуы килә Ғәбдеяндың. — Бер яғы менән дә миңә тартмаған. — Түрбаш яҡта ғүмере бөтмәҫ эштәре менән булашып йөрөгән бисәһе үҙ һүҙенә һаман ҡушылмағас, һалпыш мыйығының осон тартҡылай, йәнә нығыраҡ көйәүҙән, ҡыҫҡаҡ ҡына түйөрөм ҡашы ялпаша. — Әллә ниде һинең нәҫелгә тартҡан...

Ғәбдеяндың был һүҙҙәре сәпкә тура тейҙе: һуңғы йылдарҙа эркет көбөһөндәй йыуанайып киткән Гөлбаныу уға табан йылп итеп боролоп ҡараны.

— Ҡартайғансы шул минең нәҫел-нәсәпте күрә алманың инде. Балаларыңдың берәй кәмселеге булдымы — минен яҡ ғәйепле

## 2-се бүлек буйынса һығымта

Ноғман Мусин “Төпкөлдән төшкән килен” повесында геройҙарҙың ҡылыҡ-фиғелдәрен тәбиғәткә ҡарата булған мөнәсәбәттәренән сығып баһалай. Урманды шәхси табыш алыу сығанағы ғына итеп ҡарау кеүек стереотиптарҙан ҡотолорға саҡыра.

## 3 БҮЛЕК.
## ЯҢЫ УҠЫУ СТАНДАРТТАРЫНА ЯРАШЛЫ НОҒМАН МУСИНДЫҢ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ЭКОЛОГИЯ ПРОБЛЕМАҺЫНЫҢ КҮТӘРЕЛЕШЕН ӨЙРӘНЕҮ

Ноғман Мусиндың “Тауҙар тыны” повесын әҙәбиәт дәрестәрендә өйрәнгәндә тест алымдары тәҡдим ителә.

# Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!